БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА В УСЛОВИЯХ ГЛОБАЛИЗАЦИИ И ПОЛИЭТНИЧЕСКОЙ СРЕДЫ: ОПЫТ И ПЕРСПЕКТИВЫ

ISBN 978-5-91608-181-7 С. 390–393

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.073

УДК 398.22

**Н. Ә. Хөббитдинова**

*Ордена Знак Почета Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*проспект Октября, 71, Уфа, 450054, Россия*
*E-mail: ilimbetovazalia@mail.ru*

## БАШҠОРТ ҺҮҘ СӘНҒӘТЕ ҺӘМ ПОСТМОДЕРНИЗМ: ӘҘӘБИӘТТӘ ФОЛЬКЛОРҘЫҢ САҒЫЛЫШЫ ПРОБЛЕМАҺЫНА ҠАРАТА

В филологической науке проблема фольклорно-литературных связей всегда была и остается актуальной. Привлечение обновленных методов исследования позволит глубже и всестороннее раскрыть данную проблему, что усиливает ее актуальность. В статье сделана попытка привлечения методов интертекстуального изучения башкирской литературы как части универсалия культур.

*Ключевые слова:* Башкирская литература, постмодернизм, метод, исследование, интертекстуальность, глобализация, универсалия культур.

Билдәле булыуынса, совет осоронда фәнни эҙләнеү-тикшеренеүҙәр марксизм тәғлимәтенең тарихи-материалистик методологияһына таяна ине. Ғилми хеҙмәттәрҙә ошо алым телгә алынып ҡына кителә лә, ғәҙәттә, формулировкаһы шулайыраҡ яңғырар ине: “Метоологической основой диссертации (йәки башҡа берәй хеҙмәт. – *Н.Х.*) явились теоретические положения классиков марксизма-ленинизма о культурном наследии, решения партийных съездов и пленумов ЦК КПСС. Научно-теоретическим ориентиром исследования служили работы советских литературоведов”; “…Теоретической базой нашего исследования послужили работы классиков марксизма-ленинизма по вопросам языкознания и научные труды ведущих диалектологов нашей страны” һ.б.[Сөләймәнов, Хөббитдинова, 2012, 5]

Постсовет осоронда иһә диссертация менән авторефераттарҙың тейешле ерендә “Методологическую основу работы составляют труды следующих авторов”, тип яңғырашлы исемдәр теҙеме бирелеүсән. Быңдай ғәҙәт бөгөн дә һаҡлана, әммә ҡулланылған методтар конкрет һәм объектив бирелергә тейеш, әлбиттә.

Шул уҡ мәлдә фәндә барлыҡҡа килгән төрлө ҡараштарҙың, методологик алымдарҙың бөгөнгө көндә лә мөһим булып ҡалыуы хаҡында оноторға ярамай. XX быуаттың икенсе яртыһында илебеҙҙә бараған “фәнни тикшеренеүҙәрҙә комплекслылыҡ”, һуңғараҡ “системалылыҡ” (системность) кеүек ысулдар менән бер рәттән, “эшмәкәрлек күҙлегенән сығып эш итеү юлы” (деятельностный подход) тигән методологик ҡараштар ана шундайҙарҙан [Шәрипова, 2001, 30-31].

Бөгөн иһә төрлө фәндәрҙең берләшеү – интеграция процесын кисереү күренеше күҙәтелә. Хәҙерге ғилми хеҙмәттәрҙә методологик ысул итеп телгә алынған комплекслы һәм системалы тикшеренеү юлын (подход) файҙаланыла. Ошо ерҙә модаға әүерелеп барған методтарға туҡталып китеү зарурҙыр. Уларҙың нигеҙндә теге йәки был ғилми тикшеренеүҙең маҡсаты һәм бурыстарына ярашлы төрлө фәндәрҙең ысулдарын, алымдарын, методтарын берләштереп ҡарау ята. Комплекслы юл йәки подход менән тикшереү тигәндә,

унының төрлө фәндәрҙең (хатта бер нисек тә яҡын булмаған гуманитар һәм техник фәндәр булыуы, ихтимал) бәйләнешендә алып барылыуы күҙ уңында тотола. Мәҫәлән, фольклор менән әҙәбиәт, әҙәбиәт менән лингвистика, әҙәбиәт менән этнология йәки әҙәбиәт менән культурология, математика, химия йәки архитектура һ.б. фәндәрҙең бәйләнеше лә булыуы мөмкин. Мәҫәлән, С. И. Сухих тигән ғалим тикшеренеүҙең ғилми юлдары, ысулдары хаҡында һүҙ йөрөткәндә, М. М. Бахтиндың “Проблемы поэтики Достоевского” тигән хеҙмәтендә йыш ҡына “полифония”[1], “полифонический роман” кеүек музыка өлкәһенә ҡараған терминдарҙы ҡулланыуы хаҡында ла әйтеп үткәйне [Сухих, 2012, 303]. Йәки А.А. Арзамазов тигән ғалимдың удмурт әҙәбиәте образлылығы менән лингвосемантик үҙенсәлектәрен берләштереп филология күҙлегенән ҡарауы етмәгән, уны хатта “флористическо-фаунистический блок”, “удмуртский континуум”, “корреспонденция мифическая” кеүек төрлө фәндәр өлкәһенән (ботаника, биология, физика, лингвистика, журналистика һ.б.) билдәле булған терминдарҙы йәлеп итеү һөҙөмтәһендә, удмурт әҙәбиәтенең поэтик үҙенсәлектәрен асыҡлауҙа ҡыҙыҡлы һығымталарға килде [Арзамасов, 2016, 41]. Йә булмаһа, әкиәттәрҙе философия күҙлегенән сығып, уларҙа әхлаҡи һайлау проблемаһын (проблема выбора) ҡараусы Л. Ә. Иткулова, мәҫәлән, халыҡ ижадының был жанрын фольклористика, әҙәбиәт ғилеме, этнография, археология, философия фәндәренең материалдарын бергә уҡмаштырып файҙалланып өйрәнеүҙе хуп күрә. Бындай тикшеренеүҙәр *комплекслы* тикшеренеү тип атала.

*Системалы* юл менән алып барылған тикшеренеүҙә иһә (бында һүҙ, әлбиттә, әҙәбиәт хаҡында бара) әҙәби әҫәрҙе художестволы әҫәр иткән өлөштәре төрлө методҡа таянып анализлана. Йәғни әҫәр үҙе бер структура, система булып сығыш яһай, ана шул системаны булдырған сюжет, композиция, мотив йәки әҙәби формаһы, жанры һ.б. мәсьәләләре бер-бер артлы, логик бәйләнешле ҡарала. Уларҙың үҙенсәлектәрен асыҡ күрһәтеү маҡсатында төрлө методтарға мөрәжәғәт ителә (тарихи-сағыштырма, типологик- йәки генетик-сағыштырма, аналитик һ.б.) Мәҫәлән, беҙҙең осраҡтағы әҙәби сюжетты булдырған мотивтың семантикаһы фольклор традицияһына нигеҙләнеүе ихтимал. Фольклор традицияһына мөрәжәғәт иткәндән һуң ғына әҙәби әҫәрҙең художестволы үҙенсәлегенә башҡа күҙлектән ҡарап, унда баҙыҡ сағылыш тапҡан фольклор традицияларын анализлап, ҡыҙыҡлы тәжриәбә үткәрергә була. Был осраҡта әҫәрҙең поэтик нескәлектәре бөтә киңлегендә һәм тулылығында күренеп, төрлө төҫтәрҙә сағыуыраҡ баҙыҡланыуы ихтимал. Йәки халыҡ ижадында (әкиәттә, эпоста, легендала һ.б.) һүрәтләнгән фольклор мотивтары, сюжеттары “күҙ өйрәнгәнлектән” бөтә үҙенсәлегендә асыҡ уҡ күренмәй башлауы ла мөмкин. Әҙәбиәттә урын алғандары иһә яңы художестволы киңлектә (пространство) трансформацияланып, баҙығыраҡ сағылыуы, хатта ки унының шулай бөтә сафлығында һаҡланыуы мөмкин. Йәғни яҙма әҙәбиәт халыҡ ижады традицияларын яҙма килеш, ташта баҫтырылған рәүештә һаҡлап, мәңгеләштереүгә ирешә, үҙенә күрә һаҡлау функцияһын үтәй. Был бигерәк тә рус яҙыусылары ижадында күслөрәк төҫ ала: халҡыбыҙҙың “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” эпосының бер варианты тулыһынса XIX быуатта Т.Беляев әҫәрендә (“Куз-курпяч, башкирская повесть, писанная на башкирском языке одним курайчем и переведенная на российский в долинах гор Рифейских, 1809 года” (Казань, 1812) ана шундай яңыса художестволы яҡтыртыу табып, фәндә “Беляев версияһы” тип аталып йәшәп килә йәки шул уҡ осорҙа В.Даль тарафынан шундай уҡ эшкәртелештә “Заятүләк менән Һыуһылыу” эпосыбыҙҙың бер варианты “Башкирская русалка” исеме аҫтында ташҡа баҫтырылып, фәндә иһә “Даль версияһы” тип аталып йөрөй.

Уғаса шуны иҫкә төшөрөп китеү зарурҙыр. Әле үткән быуаттың 60-70-се йылдарында милли фольклористика өлкәһендә әүҙем эшләгән, башҡорт әҙәбиәте ғилеменә нигеҙ һалыусы күренекле ғалим Ким Әхмәтйәновтың “Поэтик образ һәм тарихи контекст” тигән мәҡәләһе беҙҙең өсөн ҡыҙыҡлы. Унда ул РСФСР яҙыусылар союзы Ойоштороу комитетының Икенсе (Өфө) пленумындағы Мостай Кәримдең сығышына һылтанып, егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа ижад иткән ҡайһы бер әҙиптәребеҙҙең (М.Ғафури, Д.Юлтый ишеләрҙең) синфи көрәште тасуирлаған тарихи осорҙо сағылдырғанда, мотлаҡ халыҡ ижады, мифологияһы традицияларына мөрәжәғәт итеүҙәрен билдәләгәйне. Йәғни синфи көрәште алып барыусылар тик изге зат булып әкиәт батырҙарын, ә инде дошмандары иһә – яуыз, кире көстәр лагерын тәшкил итеүсән. Ошо моментҡа ғалим һәм тәнҡитсе К.Әхмәтйәнов бөтә

[1]Кара: **Полифо́ни́я** в теории музыки — склад многоголосной музыки, определяющийся функциональным равноправием отдельных голосов (мелодических линий, мелодий в широком смысле) многоголосной фактуры.

әҙәби фекер һәм тормош законсыллыҡтарына таянып былай тип асыҡлыҡ индерҙе. Быны ул "башҡорт халҡының эстетик аңының мифтан художестволы фекреләүгә күсеү" процесында ҡатмарлы юл үтеүе менән бәйләне. Һәм ошо процесс барышында боронғо мифик образдар менән заман геройы араһында бәйләнештең булыуын билдәләне. Дәүерҙәр артынан дәүерҙәр үҫешкән мәлдә заман талаптары ла үҙгәрә, "яңы закондар асылыу менән, фән һәм техникалағы ҡараштар бик тиҙ иҫкерә һәм асылда йәшәүҙән туҡтай". Әҙәбиәттә, художестволы фекер киңлегендә иһә боронғо традицион образдар, тема һәм сюжеттар һаҡлана, йәки "иҫкергән тип иҫәпләнгән формалары бөгөн үҙаллы ла, һуңғы дәүерҙәрҙә яҙылған әҫәрҙәрҙең образдар системаһы эсендә бер аҙ үҙгәртелгән көйөнсә лә йәшәй" [Әхмәтйәнов, 1994, 112], тип дауам иткәйне фекерен. Икенсе төрлө әйткәндә, ҡасандыр әйтелгән һүҙ, һүрәтләнгән образ йәки сюжет, ваҡыттың күпме үтеүенә ҡарамаҫтан, яңынан ҡабатлана, саҡ ҡына үҙгәреш кисерһә лә үҙен таныта, иҫкә төшөрә. Йәғни ғалим әйткән боронғо мифология поэтикаһы бөгөнгө әҙәбиәттә лә үҙен һиҙгертә, художестволы һынланыш таба, йәғни, инде бөгөн фәннисә әйткәндә, интертекст бәйләнешен тыуҙырҙы. Ким Әхмәтйәнов, күрәһең, М.М. Бахтиндың хеҙмәттәре менән хәбәрҙар булған, сөнки тап текстар, фекерҙәр диалогы хаҡында әйткән кеүек. Алда барасаҡ һүҙ ҙә шул хаҡта.

Тормоштоң тиҙ үҫешкән, үҙгерештәр, яңырыуҙар – модернизациялар кисергән бер мәлендә ниндәйҙер яңылыҡ, прогрессив алымдарҙы һынап ҡарағанда, ҡайһы саҡ, күптән булдырылған, әммә ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында онотолған ғилми асыштар, дөйөмләштереүҙәр ана шул "яңылыҡтың" булыу ихтималлығын асыҡлай. Филология фәнендә ҡасандыр асылып та онотолоуға дусар ителгән *интертекстуаль* теорияһы билдәле. Был бөгөн ошоноң кеүек постмодернизм нигеҙендә барлыҡҡа килгән ысулға мөрәжәғәт итеүҙә ғалимдарҙың иркен фекер йөрөтөүсән, тикшеренеү эштәрендә төрлө методологик юлдарҙы самалап ҡарауы менән бәйлелер. Үҙ сиратында уны бер төрлө фекерләүҙән, ҡалыплашҡан ҡараштарҙан арыныуға ынтылыу менән дә аңлатып булалыр. Милли фәнгә килгәндә иһә әлегә традицион, ҡәҙимге ысулдарҙың ҡулланылыуы күҙәтелә. Әммә, быға саҡ һалынған теоретик нигеҙҙәрҙе инҡар итмәйенсә, шуға таянып, яңыса фекерләүселәр ҙә юҡ түгел.

Ошо юҫыҡта әҙәбиәттә теге йәки был кимәлдә сағылыш тапҡан фольклор традицияларының ҡулланыу механизмына төшөнөп, уларҙың әҫәрҙә ниндәй художестволы функция үтәп килеүен, семантикаһын асыҡлап, уның текст-ара бәйләнештәрен күрһәтеп үтеү ҡыҙыҡлы булыр ине. Быларҙың барыһын да башҡарыу маҡсатында, үрҙә телгә алынған, комплекслы һәм системалы, сағыштырма, тарихи-мәҙәни кеүек методологик алымдар менән бер рәттән, күптән билдәле һәм герменевтиканың бер төрө булып та, әммә совет фәнендә телдән төшөп ҡалған ерҙән бөгөнгө рәсәй ғилемендә тергеҙелгән, *интертекст ысулына* айырыуса мөрәжәғәт итәбеҙ. Быны менән ниндәйҙер иҫ киткес асыш яһау артынан ҡыумайынса, донъя мәҙәниәтенең бер өлөшө булған башҡорт милли әҙәбиәтен дә ошо ысулдар ярҙамында тикшереп ҡарап, бөгөнгө глобаллаштереү осоронда уны киңерәк даирәләргә сығарыу ниәте өҫтөнөрәк тип табылды. Был йәһәттән беҙҙең өсөн әҙәби әҫәрҙә сағылыш тапҡан, файҙаланылған фольклор традицияларын һанап ҡына үтмәйенсә, уларҙы тулайым художестволы-эстетик ҡараштан сығып асыҡлап, әҙәбиәт менән фольклор араһындағы бәйләнеште үҙһенгән төрлө осорҙа ижад ителгән әҙәби әҫәрҙәр араһындағы интертексты өйрәнеү бигерәк ҡыҙыҡлы булыр ине.

Герменевтика, билдәле булыуынса, текст, һүҙ мәғәнәһенә төшөнөүҙе, интепретациялауҙы аңлата. Әҙәби әҫәрҙә фольклор традицияларының сағылыш табыуы, әҫәргә ниндәйҙер кимәлдә художестволы һәм эстетик яҡтан тәьҫир итеүе, уның поэтик үҙенсәлектәрен арттырыуы яҡшы аңлашыла. Унда урын алған халыҡ ижады элементтарын һәр кем еңел генә барлап, атап сыға ала йәки фольклор сюжеты менән әҙәби әҫәр йә булмаһа бер авторҙың әҫәре менән башҡа автор әҫәре араһындағы (йәки унда бирелгән герой образдары, мотивтары) оҡшашлыҡ, параллелдарҙы күреп, шуның менән интертекстуаль бәйләнеш хаҡында һүҙ йөрөтә ала. Әммә ысын мәғәнәһендәге ғилми тикшеренеү быныҡ менән генә сикләнмәй әле. Сөнки билдәле ғалим Б.В. Томашевский әйтеүенсә"…обнаруженные «параллели» будут носить характер мало значащего «сырого материала», а «выискивание этих параллелей» вне уяснения их характера, сути, функции будет представлять собой что-то вроде «литературного коллекционирования» [Томашевский, 1960, 81-82]. Фольклор традицияларының семантик үҙенсәлектәрен өйрәнгәс, уларҙың әҫәрҙәге үтәгән художестволы функцияһы, роле, тотҡан урыны, мәғәнәһе (йәғни теге йәки был фольклор күренешенең семантикаһы, тәбиғәте, идея-эстетик торошо) йәнә төрлө яҡлап асыҡлана һәм

яҡтыртыла. Бының менән әҙәби әҫәрҙең төп асылына, уның башҡа әҙәбиәт, рухи-мәҙәниәт, йәмғиәт күренештәренә (традицияларына) бәйле булыуына, авторҙың бының менән нимә әйтергә теләүенә тәрәнерәк төшөнөү мөмкинлеге тыуа. “Актуальные проблемы методологии литературной критики” тигән хеҙмәттә әйтелеүенсә, “…всякий текст при всей своей неповторимости является представителем некоей общности, … определенной культурной традиции, символ присутствия духовности. Интерпретация может быть направлена на выявление этой объективной духовности, которая имеет исторически меняющиеся формы, но имеет некую неизменную сущность, своим постоянством обеспечивающую непрерывность культурной традиции, отражающую единство исторического процесса” [Сөләймәнов, Хөббитдинова, 2012, 14].

Шулай итеп, башҡорт әҙәбиәтен ошо һәм интертекстуаллек күҙлегенән ҡарау уны мәҙәни, художестволы универсалий (культурные, художественные универсалия) фонында тикшереү, уның художестволы дөйөм һәм уртаҡ ерҙәрен байҡау, башҡорт художестволы һүҙ сәнғәтен бөтә донъя мәҙәниәтенең бер өлөшө булараҡ тикшереү мөмкинлеген дә бирер ине.

## Әҙәбиәт

Арзамазов А.А. Эволюция образной системы и лингвосемантические трансформации в удмуртской поэзии половины 1970-х – начала 2010-х гг.: Автореферат докторской диссертации. Ижевск, 2016. 41 с.

Сөләймәнов Ә.М., Хөббитдинова Н.Ә. Әҙәби әҫәрҙе тикшереү юлдары. Өфө: Китап, 2012. 168 б.

Сухих С.И. Методология литературоведения; комплексный и системный методы анализа литературы // Вестник нижегородского университета им. Н.И.Лобачевского. 2012. №6 (1). С.298-303.

Томашевский Б.В. Пушкин и Франция. Л., 1960. 498 с.

Шәрипова З.Я. Әҙәбиәт ғилеме һәм заман. Өфө: Китап, 2001. 320 с.

Әхмәтйәнов К.Ә. Поэтик образлылыҡ. Өфө, 1994. 151 с.

**N. A. Khubbitdinova**

*Order of the Badge of Honour Institute of History, Language and Literature*
*UFRC Russian Academy of Sciences*
*October Avenue, 71, Ufa, 450054, Russian Federation*
*E-mail: narkas08@mail.ru*

## BASHKIR WORD ART AND POSTMODERNISM: TO THE PROBLEM OF REFLECTING FOLKLORE IN LITERATURE

In philological science, the problem of folklore and literary relations has always been and remains relevant. Attracting updated research methods will allow a deeper and more comprehensive disclosure of this problem, which enhances its relevance. The article attempts to attract methods of intertextual study of Bashkir literature as part of the universal culture.

*Keywords:* Bashkir literature, postmodernism, method, research, intertextuality, globalization, universal culture.

## References

Arzamazov A.A. The evolution of the figurative system and linguistic-semantic transformations in Udmurt poetry of the half of the 1970s - beginning of the 2010s: Abstract of a doctoral dissertation. Izhevsk, 2016 .41 p.

Suleymanov A.M., Khubbitdinova N.A. Ways to analyze a literary work. Ufa: Kitap, 2012. 168 p.

Sukhikh S.I. Methodology of literary criticism; complex and systematic methods of literature analysis // Bulletin of the Nizhny Novgorod University. N.I. Lobachevsky. 2012. No. 6 (1). P.298-303.

Tomashevsky B.V. Pushkin and France. L., 1960. 498 p.

Sharipova Z. Ya. Literary criticism and era. Ufa: Kitap, 2001. 320 p.

Akhmetyanov K.A. Poetic imagery. Ufa, 1994. 151 p.